СПОРТ

*Мөрат ҒАРИФУЛЛИН*

# Олимпиада: еңеүҙәр, еңелеүҙәр...

Донъяны киҫкен ҡараштар ҡаршылығы, боролош йә бәрелештәр нисек кенә тетрәндермәһен, бар кешелекте төрлө хәүефтәр ҡурҡынысы борсомаһын, бер мәлдә бар тарафты, бар кешене — булмышына, диненә, башҡаса кемлегенә ҡарап тормай — бер уй, бер хәстәр менән янырға саҡырыусы Олимпиада уйындары бар. Был спорт тантанаһы көстө, таһыллыҡты, етеҙлекте һынау майҙаны ғына түгел, ә илдәрҙең, айырым милләттәрҙең бөтә донъяға үҙҙәрен танытыр сараһы ла. Олимпиада — оло спорт менән бергә оло сәйәсәт тә. Кемдең кемлеге, фекерҙәр берҙәмлеге, уйҙар ҡаршылығы ла, күңел тарҡаулығы ла бында сағылыш таба кеүек. Ләкин иң тәүҙә еңеүгә ынтылыш, рух күтәренкелеге бөтәһен хәл итә.

Февралдә Италияның Турин ҡалаһында үткән XX Ҡышҡы Олимпиада ла тарихта үҙ эҙен ҡалдырҙы. Тарих тигәндәй, ҡышҡы уйындарға ”нигеҙ һалыныуға” биш йылдан бер быуат буласаҡ, йәғни 1911 йылда ҡышҡы уйындар үткәреү мәсьәләһе ҡалҡып сыға. Тик төплө генә ҡарарға килә алмайҙар, сөнки хоккей һәм фигуралы шыуыу йәйге Олимпиада уйындары программаһына ингән була. Шулай ҙа 1924 йылда Францияла буласаҡ йәйге Олимпиада алдынан ҡышҡы спорт төрҙәре аҙналығы үтә һәм унда тәүге Ҡышҡы Олимпиада уйындары тигән рәсми статус бирелә. Шунан бирле ул һәр дүрт йыл һайын даими үткәрелеп килә. Тәүге уйындарҙа 16 илдән 293 спортсы, шул иҫәптән 13 ҡатын-ҡыҙ бобслей, саңғы, трамплиндан һикереү, конькиҙа йүгереү, фигуралы шыуыу һәм хоккей буйынса ярыша. Гүзәл заттар фигуралы шыуыу төрөндә генә сығыш яһай. Италияла быйыл 85 илдән ике мең ярымдан ашыу спортсы көс һынашты, 84 комплект миҙал үҙ хужаларын тапты.

## Профессионалдарға профессиональ ҡараш

Рәсәй командаһы нисек сығыш яһаны һуң был Олимпиадала? Дөрөҫөрәге, беҙ еңелдекме, әллә оттоҡмо? Миҙалдар һаны буйынса Рәсәй Германия, АҠШ һәм Австрияны алға үткәреп, дүртенсе урын алды, спортсыларыбыҙ 8 алтын, 6 көмөш һәм 8 бронза миҙал яулап һөйөндөрҙө. Был әҙме, күпме?

Рәсәйҙең олимпиада комитеты президенты Леонид Тягачев, уңышлы сығыш яһаныҡ, дүрт йыл элек Солт-Лейк-Сити ҡалаһында үткән Олимпиада менән сағыштырғанда өс алтын миҙалға күберәк, тип белдерҙе. Ярты йыл элек уйын алдынан спорт босстары миҙалдар буйынса "серле" пландарын халыҡҡа еткергәйне, йәнәһе лә төрлө кимәлдәге 25 миҙал, шуларҙың биш-алтыһы мотлаҡ алтын буласаҡ тип вәғәҙәләне. Аңлашыла, алдан кәртәләгәндәр, һәр ваҡыттағыса чиновниктар алдан күрә белеү һәләтенә эйә. Имеш... Отолмағанбыҙ — 8 алтын миҙал!

СССР Ҡышҡы уйындарҙа 1956 йылда ныҡлы сығыш яһай башлай һәм үткән 11 Олимпиаданың туғыҙында — беренсе, икәүһендә икенсе урынды яулай. Бына был һөҙөмтә, исмаһам! Ә Рәсәй 1994 йылда 11 алтын миҙал менән тәүге баҫҡысҡа күтәрелә. Һуңғы уйындарҙа туғыҙ һәм биш алтын миҙал менән өсөнсө һәм дүртенсе урын менән ҡәнәғәтләнгән. Тимәк, Л.Тягачев иң насар һөҙөмтә менән сағыштырып, уңыш тип яр һала. Был һөҙөмтәләр Рәсәйҙә спортҡа булған ҡарашты билдәләйме?! Улай тиһәң, илебеҙ иҡтисади көрсөктән сыға барған һайын, уға иғтибар ҙа артҡан кеүек. Ана, биатлон эстафетаһында көмөш миҙал яулауҙа Павел Ростовцев нимә тине: "Минеңсә, иң ҙур еңеүебеҙ шул — спорт етәкселәренең спортсыларға ҡарата бик тә иғтибарлы ҡараш тәрбиәләүендә. Һуңғы йылдарҙа бигерәк тә. Улар хәҙер беҙҙән миҙал түгел, ә эшебеҙгә, яратҡан эшебеҙгә, кешесә, нормаль мөнәсәбәт булыуын талап итә. Һәм беҙ хәҙер профессионалдар".

Дөрөҫ, төп һөҙөмтә — дәүләттең һәм йәмғиәттең спортҡа ҡарашы ыңғай яҡҡа үҙгәреүендә. Үткән ун йыллыҡта спорт тураһында уйларға инеме, әллә өҫтәлгә икмәк ҡуйыу хаҡындамы? Илде талаған олигархтар, йә булмаһа милләт-ара аңлашылмаусанлыҡ — баштан ашҡан ине хәстәрҙәр. Хәҙер спортсыларға шарттар ярайһы уҡ тыуҙырыла килә. Конькиҙа уҙышыусылар өсөн Олимпиада "боҙон" төҙөп ҡуйыуҙары булды, Светлана Журова алтын миҙал да тағып ҡайтты. Ә был спорт төрөнән ике тиҫтә йылға яҡын ундай уңыш булғаны юҡ ине.

Ысынлап та, бындай кимәлдәге ярыштарҙа тик профессионалдар ғына еңеүгә өлгәшә ала. Үҙебеҙҙең фигуристар алдында баш эйергә мөмкин. Ни тиһәң дә, фигуристарҙың совет мәктәбе юғалып ҡалманы, дүрт төрҙән өс алтындың беҙҙә булыуы — бик тә ҙур уңыш! Был осорҙа фигуралы шыуыу көйәрмәндәр араһында рейтинг буйынса футболды уҙып, беренсе урынға сыға яҙҙы!

Беҙҙең саңғысыларға, биатлонсыларға нисек һоҡланмайһың инде. Златоуст ҡалаһында тыуып үҫкән башҡорт ҡыҙы Светлана Ишморато-

ва биатлон буйынса 15 саҡырым алыҫлыҡтағы бәйгелә алтын миҙал яулап, илебеҙҙе лә, башҡорт халҡын да бөтә донъяға танытты. Ғөмүмән, Туринда Светлана ике тапҡыр Олимпиада чемпионы исемен яуланы, ул иптәш ҡыҙҙары менән эстафетала ла иң көслө икәндәрен иҫбатланы. Һуңғы булып йүгереүсе Альбина Әхәтова финишҡа Рәсәй флагын тотоп килеп етте, ә был ваҡытта офоҡта дәғүәселәр күренмәй ҙә ине әле. Ошо мәлдә күпме рәсәйлеләр үҙҙәрендә ғорурлыҡ тойғоһо кисерҙе. Саңғысы ҡыҙҙар ҙа эстафетала һис кенә беренселекте бирмәне. Ә Евгений Дементьев?! Ул геройға әйләнде. Олимпиаданың тәүге көнөндә үк дуатлонда алтын миҙал яулап, бөтәһен дә таң ҡалдырҙы. Егеттән бөтөнләй миҙал көтмәгәйнеләр. Олимпиаданың һуңғы көнөндә Евгений 50 саҡырым алыҫлыҡта көмөш миҙал да алып ҡуйҙы. Шәп, һоҡланғыс!

Хоккей. Тарасов, Тихонов, Рагулин, Михайлов, Петров, Старшинов, Третьяк, Фетисов, Ларионов, Ғимаев, Буре, Яшин... Совет халҡының да, рәсәйҙәрҙең дә был спорт төрөнә табынған саҡтары бар ине. Ине... Әле лә ниндәйҙер мөғжизә көттөк. Һәр кем күңеле төбөндә алтынға булған өмөтөн сер итеп һаҡланы, күҙ тейҙереүҙән ҡурҡты. Рәсәй командаһы ниндәй бит — ”йондоҙҙар” йыйылмаһы! Команданың генераль менеджеры Павел Буре: ”Беҙ Италияға еңеү өсөн барабыҙ”, — тип ебәрҙе. Ә спорт чиновниктары, бронза яулау — еңеүгә тиң буласаҡ, тип белдерҙе. Һөҙөмтә... дүртенсе урын, алтын да юҡ, бронза ла. Йәл. Ковальчук — Ковалев — Дацюк, Овечкин — Малькин — Яшин... Йәл, быңдай ”йондоҙ”ло состав, моғайын, оҙаҡ йылдар йыйыла алмаҫ әле. Быйылғы йыйылма команданың ҡоласы, эй, киң ине бит. Ә уйын насар башланмағайны. Хатта сирек финалда белгестәр чемпион буласаҡ тип юраған Канада хоккейсыларын 2:0 иҫәбе менән еңгәс, был команда теләһә ниндәй дәғүәсене еңәсәк кеүек күренде. Ә ярым финалда финдар беҙҙе 0:4 иҫәбенә тар-мар итте. Шуныһы ҡыҙыҡ, Суоми командаһы Олимпиадала ”совет хоккейын” уйнаһа, йәки һәр уйынсы универсаль хоккейсы (беҙҙең яҡташыбыҙ Ирек Ғимаевты иҫләйһегеҙҙер әле, ул шәп һаҡсы ла, мәргән һөжүмсе лә ине) һәм команда — бер йоҙроҡ булһа, ә беҙҙең профессионалдар Канада манераһын күрһәтте, йәки мин-минлек, индивидуаль уйынсыға өҫтөнлөк биреү беҙҙе харап итте лә. Еңелеүебеҙҙең төп сәбәбе шул — егеттәребеҙҙә элекке кеүек илгә тоғролоҡ, патриотизм тойғоһоноң самалы булыуы. Кеҫәләре аҡса менән тулған, НХЛ-да уйнаған хоккейсыларыбыҙҙың психологияһы бик үҙенсәлекле, НХЛ-да еңелеүгә еңел ҡарайҙар. Алда — 50-нән ашыу уйын, контракт буйынса үҙеңде күрһәтһәң, булған. Ә бында, Олимпиадала, 11 көн эсендә — 8 уйын. Малдан һәм дандан бигерәк, ил, халыҡ миңә ҡарай тигән тойғо ҡиммәтерәк булырға тейеш тә...

Рәсәй юғары баҫҡысҡа күтәрелеү өсөн нимә эшләргә тейеш? Берҙән, профессионалдарҙа профессиональ ҡараш тәрбиәләнергә тейеш. Ә бының өсөн бөтә йәһәттән шарттар тыуҙырылыуы фарыз. Илдең иҡтисади йәһәттән алға китеүен билдәләр өсөн спорт-ярыш күрһәткестәренә күҙ һалыу ҙа етә, тимәк. Икенсенән, тау-саңғы программа-

һында тиҫтәнән ашыу комплект миҙал уйнатыла. Австрия уйынсылары ошонда үҙҙәрен күрһәтә лә инде. Беҙгә был өлкәгә лә ныҡлы иғтибар бирергә кәрәк.

Шуныһы һөйөнөслө, был Олимпиада Рәсәйҙең алға табан хәрәкәт итеүен тағы бер иҫбатланы. "Беҙ үҙебеҙҙе Италияла тип түгел, ә Рәсәйҙә сығыш яһаған кеүек тойҙоҡ. Ҡайҙа ҡарама, ҡайҙа барма, һәр трибунала беҙҙе яҡлаған, беҙҙең өсөн янған ватандаш көйәрмәндәрҙең булыуы беҙгә көс бирҙе" — еңеү яулаған спортсыларыбыҙҙың һүҙҙәре был. Егерме йыл элек Рәсәй көйәрмәне был ҙур спорт байрамына талашып-һуғышып һәм ҙур сумка тотоп бара ине. Һәр мөйөштә улар ҡара һәм ҡыҙыл ыуылдырыҡ, "командир"ҙар сәғәте һәм башҡа көнбайышта ҡиммәтле һаналған әйберҙәр менән һатыу итеп, йыйылма команда өсөн "яныр"ға ваҡыты ла ҡалмаҫ ине. Һәм үҙ иленә "модный" ваҡ-төйәк алып ҡайта торғайны. Ә хәҙерге турист-көйәрмән бындай ваҡ мәшәҡәттән бөтөнләй азат, сөнки үҙ илендә бөтәһе лә бар. Аҡса эшләр өсөн мөмкинлектәре лә етерлек. Туристарҙың 70 проценты бизнесмендар, улар хатта итальяндарға ҡарағанда ла шәберәк һәм заманса кейенә, шәп ресторанда туҡланалар, инглизсә һәйбәт һөйләшәләр. Ҡыҫҡаһы, үҙҙәрен өйҙәрендәге кеүек хис итәләр. Был да бит илебеҙҙең иҡтисади йәһәттән үҫеше тураһында һөйләй түгелме?!

## Бейеклеккә осор офоҡ бар

Башҡортостандан спорт байрамында биш спорт төрөндә ете егет Рәсәй намыҫын яҡланы. Ете: әҙме был, күпме? Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында был һан иң юғарыһы. Ғөмүмән, Рәсәй буйынса беҙҙең республика олимпия резервтарын әҙерләү буйынса бишенсе урында килә. Спорт һәм туризмдың матди-техник базаһын үҫтереү һәм уларҙы уңышлы ҡулланыу буйынса ла Башҡортостан иң алдынғы урындарҙы биләй. Һуңғы биш йыл эсендә генә беҙҙә 1319(!) спорт ҡоролмаһы төҙөлгән, шулар араһында 1500 урынлыҡ стадиондар икәү, һауыҡтырыу комплекстары 27, спорт залдары 180. Һоҡландырғыс һандар бит! Торғонлоҡ йылдарында бәләкәй генә мәктәп төҙөү өсөн күпме Мәскәү юлын тапауҙары һәм нисә йыл уны төҙөүҙәре тураһында һөйләүҙәре хәҙер әкиәт кенә кеүек. Ә инде Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығын байрам иткәндә иһә элекке "Труд" стадионы урынында халыҡ-ара стандарттарға яуап биргән "Өфө-Арена" яңы спорт боҙ һарайы ишеген асасаҡбыҙ. Ундай спорт һарайы Рәсәйҙә әлегә Ярославлдә генә бар. Шулай уҡ "Аҡбуҙат" ипподромы ла халыҡ-ара ярыштарҙы ҡабул итерлек кимәлгә киләсәк. Ғөмүмән, республикабыҙҙа спортҡа иғтибар ҙур, мөмкинлектәр бар — башҡорт спортсыларын үҫтерергә генә кәрәк! Атаҡлы тренерҙарҙы ла йәлеп итеү яҙыҡ булмаҫ.

БР Президенты Указы менән Олимпиада уйындары еңеүселәренә аҡсалата бүләктәр биреү ҙә ҡаралған. Алтын яулаусыға 30 мең доллар булһа, көмөш һәм бронза миҙалдарға — 20, 10 мең доллар.

Быйыл 20 мең доллар менән Алексей Селиверстов бүләкләнде. Эйе, Башҡортостан спортсылары араһында миҙал менән ҡайтыусылар ҙа булды.

Бобслейҙа, дүрт урынлыҡ бобта уҙышыуҙа беҙҙең йыйылма команда оло дан, оло мәртәбә менән сығыш яһаны. Александр Зубков, Филипп Егоров, Алексей Селиверстов һәм Алексей Воевода был спорт төрөндә Рәсәй өсөн беренсе тапҡыр миҙал яуланы. Немецтарҙан улар 0,13 секундҡа ғына ҡалышты.


*Алексей Селиверстов*

Турин Олимпиадаһы Зубков экипажын тәүҙә илатырлыҡ хәлгә ҡуйҙы. Күнекмә ваҡытында боб әйләнеп, Егоров менән яҡташыбыҙ Селиверстов арыу ғына йәрәхәттәр алды. Ләкин был уңышһыҙлыҡ егеттәрҙә, күренеүенсә, берҙәмлек кенә уятты. Профессионализм, сәм һәм ҡомар юҡ-бар бәләләрҙән күпкә көслө булып сыҡты. Көмөш миҙалға егеттәр алтын алған немецтарға ҡарағанда ла нығыраҡ һөйөнгәндәрҙер. Рәсәй бобслейы өсөн был, ысынлап та, алтынға тиң. Һуңғы тапҡыр ватандаштарыбыҙ 1988 йылдан, йәки СССР замандарынан бирле пьедесталға күтәрелгәндәре юҡ ине бит. Тағы шуныһы — бобслеистарҙың был еңеүен батырлыҡҡа ла тиңләргә була, сөнки Рәсәйҙә ошо көнгә тиклем бер бобслей трассаһы ла юҡ. Спортсылар илебеҙҙән ситтә — Францияла, Германияла шөғөлләнергә мәжбүр. Алтынға тиң көмөшөгөҙ менән, егеттәр! Алексей — Башҡортостан ғорурлығы, тип әйтергә генә ҡала.

Шулай ҙа башҡортостанлылар араһында иң ҙур өмөт — Максим Чудовта ине. Биатлон буйынса Рәсәй йыйылма командаһында иң йәше, иң етеҙе һәм иң өмөтлөһө лә ине ул. Олимпиада башланмаҫ уҡ, Рәсәйҙең олимпиада комитеты үткәргән һорау алыуҙа, ул фигуралы шыуыу йондоҙҙары Евгений Плющенко һәм Ирина Слуцкая менән бергә халыҡтың иң ышанған спортсыһы ине. Егетебеҙ өмөттө аҡлап уҡ етмәне, тәжрибәһе самалы булдымы, шәп йүгерһә лә, яҙа атты. 20 км уҙышта биш тапҡыр, масс-стартта өс тапҡыр сәпте "бысратты", эҙәрлекләү ярышында дүрт тапҡыр ҡыйыш атып, ул барыбер 10 иң көслө спортсы иҫәбенә инде.

*Максим Чудов*


Туринда Сергей Масленников та һөйөндөрҙө. 90 метрлыҡ трамплиндан һикереүҙә ул хатта лидерҙар иҫәбендә

килде, ә 15 км ярышта һынатып ҡуйҙы. 10-сы урын Сергей өсөн ҙур уңыш. Һуңғы йылдарҙа трамплинда Рәсәй йыйылма командаһын Башҡортостан спортсылары тулыландыра. Шорт-тректа ғәҙәттә Ҡытай йә Корея уйынсылары уңышлы сығыш яһай. Был спорт төрө менән Омскиҙа ғына шөғөлләнәләр. Яҡташыбыҙ Вячеслав Кургиняндың йыйылма командаға эләгеп, 10—20-се урындар яулауы насар һөҙөмтә түгел. Иғтибар иткәнһегеҙҙер, Башҡортостанда һирәк спорт төрҙәре нығ үҫеш алған. Был республикаға мәртәбә өҫтәй.

Спорт байрамы тамам. Еңеүҙәр һоҡландырһа, ғорурлыҡ уятһа, еңелеүҙәр һабаҡ бирҙе, уйҙарға һалды. Иң мөһиме, был байрамда беҙ сит булманыҡ. Үҙебеҙҙе лә, һөнәрҙәрҙе лә күрһәттек!

**Башҡортостан спортсылары**
**XX Ҡышҡы Олимпиада уйындарында нисек сығыш яһаны?**

| Спортсы, спорт төрө | Ярыштар | Урын |
|---|---|---|
| **Алексей Селиверстов**<br>бобслей | Дүрт урынлыҡ бобта уҙыш | 2 |
| **Сергей Голубев**<br>бобслей | Дүрт урынлыҡ бобта уҙыш | 9 |
| **Максим Чудов**<br>биатлон | 20 км-ға ярыш<br>10 км-ға ярыш — спринт<br>12,5 км-ға эҙәрлекләү ярышы<br>12,5 км-ға масс-старт | 32<br>10<br>9<br>15 |
| **Сергей Масленников**<br>икеалыш | Трамплин К-90+15 км-ға ярыш<br>Команда бәйгеһе:<br>Трамплин К-120+4,5 км-ға ярыш<br>Трамплин К-120+7,5 км-ға ярыш | 10<br><br>9<br>43 |
| **Дмитрий Васильев**<br>трамплиндан һикереү | Трамплин К-90<br>Трамплин К-120<br>Команда бәйгеһе:<br>Трамплин К-120 | 10<br>17<br><br>8 |
| **Илдар Фәткуллин**<br>трамплиндан һикереү | Трамплин К-90<br>Трамплин К-120<br>Команда бәйгеһе:<br>Трамплин К-120 | 44<br>41<br><br>8 |
| **Вячеслав Кургинян**<br>шорт-трек | 1500 метрға йүгереү<br>1000 метрға йүгереү<br>500 метрға йүгереү | 15<br>18<br>14 |